# МАЙ - ҺАБАНАЙ

**1-се картотека**

**Бәпембәне күҙәтеү.**

**Маҡсат**: - бәпембә тураһында белемдәрен барлау, тәбиғәтте һаҡларға һәм ярҙам итеүгә булышлыҡ итеү, дарыу үләндәре тураһында мәғлүмәт биреү.

**Эш барышы:**

һикерешә бәпембәләр
йәшел үлән өҫтөндә
һикерешкән бәпембәләр
алтын ҡояш төҫөндә. (Ф.Туғыҙбаева)

Балаларға һорауҙар биреү - бәпембә нимәгә оҡшаған? Ҡасан бәпембәләрҙе күҙәтергә һәм һоҡланырға мөмкин?бәпембәләрҙең ниндәй ҡушаматтары бар? Ни өсөн бәпембәләр дарыу үләне булып һанала? Был үлән нимәне дауалай?

**Тикшереү - тәжрибә эше**-ниндәй үлән үҙенең орлоҡтарын парашют кеүек осороп йөрөтә?

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге:**

-майҙансыҡты сүп; сарҙан таҙартыу; хеҙмәтенңең һөҙөмтәһен күрергә өйрәтеү.

**Хәрәкәтле уйындар "Беҙ, беҙ, беҙ инек беҙ ун ике ҡыҙ инек"** - һүҙҙәренә ярашлы хәрәкәттәр башҡарыу, етеҙ йүгереүҙә күнектереү.

**Шәхси хәрәкәтте үҫтереү күнегеүҙәре** - бер аяҡлап, ике аяҡлап алға - артҡа һикереүҙә күнектереү.

**2-се картотека**

**Юл япрағын күҙәтеү**

**Маҡсат** - танып белеү эшмәкәрлеген үҫтереү, дарыу үләндәре тураһында белемдәрен камиллаштырыу.

**Эш барышы**:

Тәрбиәсе балалар менән әңгәмә үткәрә.

- Халыҡта май айын тағы нимә тип атайҙар?
- майҙансыҡтың ҡайһы ерҙәрендә үлән шытып сыҡҡан? (ҡояш нығыраҡ йылытҡан ерҙәрҙә үлән шәберәк ҡалҡҡан.)
- май ямғырҙарынан һуң үҫемлектәр нимә эшләй? (улар ныҡ йәшәрә башлай)
- юл ситендә үҫеп ултырған үлән нисек атала? (юл япрағы)
- ни өсөн?ул яҫы япраҡтары аҫтында нимә йәшерә? (тамырҙары өсөн дым һаҡлай)
- юл япрағы япраҡтарын ни өсөн өҫкә күтәрә? (сөнки унда һыу, дым күп - ҡояш әҙ генә киптереп ала)
- был үлән нимәһе менән файҙалы?

**Тикшереү - тәжрибә эше** - лупа аша юл япрағының япраҡтарын ҡарау.башҡа үләндәрҙең япраҡтары менән сағыштырыу**.**

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге-** веранданы таҙалап сығарыу**.**

**Уйын эшмәкәрлеге** - "Таны һәм әйт" - дарыу үләндәрен башҡа үҫемлектәрҙән айырырға өйрәтеү.

**Хәрәкәтле уйын** "Әбәк" - етеҙлектә,тиҙ реакцияла күнектереү.

**3- сө картотека**
**Бөжәктәрҙе күҙәтеү.**
**Маҡсат**: бөжәктәрҙе бер береһе менән сағыштыра, атамаларын белергә булышлыҡ итеү.
**Эш барышы:**
Балалар менән әңгәмә үткәреү, йомаҡтар ҡойоу.
1. Йылан түгел - саға,
ҡош түгел - оса. (бал ҡорттары)
2. Сыбар ала күлдәге,
тотһаң уңа биҙәге. (күбәләк)
3. Безелдәр, тезелдәр
Һиңә ҡунһа, ҡан эсәр. (серекәй)
4. Сиң - сиң итә, ситәнгә менә. (сиңерткә)
5. Йәне бар, ҡаны юҡ,
өнө бар, йөнө юҡ. (себен).
- бер һүҙ менән нисек атала ошо яуаптар? (бөжәктәр)
- тағы ла ниндәй бөжәктәрҙе һеҙ беләһегеҙ?
- ниндәй бөжәк сәскәләрҙе аталандыра? (бал ҡорто)
- бөжәктәр ҡайҙа йәшәй? Нимә менән туҡланалар?
- бөжәктәрҙән нисек һаҡланырға? Улар дошмандарынан нисек һаҡланалар? ниндәй бөжәктәр файҙа килтерәләр? Серекәйҙәрҙең ҡолаҡтары бармы ? Улар ни өсөн зыян килтерәләр?
**Тикшереү - тәжрибә эше**
- ҡамҡаны табырға (божья коровка), ҡырмыҫҡалар юлын табырға.
**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**
- майҙансыҡты сүп - сарҙан таҙартыу.
**Хәрәкәтле уйындар**
- **"Айыу менән бал ҡорттары"** – иғтибарлы, етеҙ булырға күнектереү.
- **"Соландағы сыскандар**" - сигнал буйынса ғына хәрәкәт башларға, бау аша шыуышып сығыуҙа күнектереү.
**Шәхсән эш:** төрлө йүгереү төрҙәрендә күнектереү.

**4-се картотека**
**Һауа торошон күҙәтеү.**
**Маҡсат** - балаларға йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәттәге яҙғы үҙгәрештәрҙе күрергә һәм һығымта яһарға булышлыҡ итергә.
Боҙ, ҡар ирене,
һыуҙар йүгерҙе.
йырлап йылғалар, йәштәр түгелде.
көндәр оҙая,
төндәр ҡыҫҡара.
был ҡайһы ваҡыт?
Йә ,әйтеп ҡара.     Ғ.Туҡай.

Әңгәмә үткәреү:
- Ҡар ҡайҙа булды? Ҡар ирегәндән һуңғы йыйылған ҡар һыуҙары ҡайҙа булды? (һыу кибеп парға әйләнде һәм өҫкә күтәрелеп болоттарға йыйылдылар). Күк йөҙө ниндәй төҫкә инде? Ниндәй температурала ямғыр яуа?
**Хеҙмәт эшмәкәрлеге:**
- майҙансыҡта сүп - сарҙы таҙартыу.
**Хәрәкәтле уйындар:** "Тамсыҡҡайҙар" - ике рәткә теҙелергә, етеҙ генә түңәрәккә теҙелергә булышлыҡ итеү, етеҙ реакция, хәрәкәт әүҙемлеге тәрбиәләү.
**Шәхсән эш** - уң һәм һул ҡулдар менән сәпкә ташлауҙа күнектереү, коллектив эште татыу һәм бер бөтөн булып эшләргә булышлыҡ итеү.

**5-се картотека**

**Күбәләкте күҙәтеү.**

**Маҡсат:** күбәләктең килеп сығышы,уның файҙаһы тураһында белешмә биреү, экологик уйлауҙы, фекерләүҙе үҫтереү, бөтә тереклеккә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

- сыбар ала күлдәге, тотһаң уңа биҙәге (күбәләк)

Әңгәмә : -һеҙ ниндәй күбәләктәрҙе беләһегеҙ?

- улар нимә менән туҡланалар?(сәскәләрҙең һуты менән)

- уларҙың файҙаһы бармы?(сәскәнән сәскәгә осоп уларҙы аталандыралар, ләкин үҙҙәре бал йыймайҙар)

- күбәләктәр йәйҙең бер йәме, матурлығы булып һанала, бөтә матур еңел әйберҙәрҙе күбәләк менән сағыштыралар.

**Хеҙмәт эшмәкәрлеге**: тәрбиәсегә сәскәләр ултыртырға ярҙамлашыу.

**Хәрәкәтле уйындар -"Ҡаҙҙар - аҡҡоштар" -** һүҙҙәренә ярашлы хәрәкәттәр башҡарыу, етеҙ йүгереүҙә күнектереү.

Майҙансыҡта "Футбол" уйнау - хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен онотмаҫҡа, етеҙ хәрәкәтләнеү, тиҙ реакция булдырыуға булышлыҡ итеү.

**Маҡсат:** Балалар менән яҙҙың иң тәүге ҡошсоғн ҡаршылау, ”ҡарға ҡайтһа - яҙ ҡайта” кеүек мәҫәлдәрҙе иҫкә төшөрөү һәм аңлатыу, һынамыштар тураһында әңгәмәләшеү.

**Хәрәкәтле уйындар “Кемдең звеноһы тиҙерәк теҙелә”** - сигнал буйынса хәрәкәтләнергә, атлауҙы һәм йүгереүҙе автоматлаштырыу**,** хәрәкәттәрҙе бер береһе менән сағыштырып, бер тигеҙ башҡарырға.

**Хеҙмәт:** - кескәй төркөмдәрҙең майҙансыҡтарын ҡар емереүҙә ярҙам итергә булышлыҡ итеү.

**6-сы картотека.**

**Ҡарғаларҙы күҙәтеү.**

**7-се картотека**

**Сыйырсыҡтарҙы күҙәтеү**.

**Маҡсат** - йылы яҡтан осоп ҡайтыусы ҡоштар тураһында белемдәрен Тулыландырыу, сыйырсыҡтарҙың йәшәү шарттарын яҡшыртыу өсөн нимәләр Эшләргә кәрәклеге тураһында әңгәмәләшеү.

Йылы яҡтарҙан сыйырсыҡтар осоп ҡайттылар.
Сыйырсыҡтар өсөн беҙ
Матур оя яһаныҡ.
Көн буйына тәҙрәнән
Ҡышты күпме ҡараныҡ.
Сыйырсыҡтар килделәр !
Улар,ана,һайрайҙар!
Матур ояларына
Һоҡланышып ҡарайҙар!

Сыйырсыҡтар тураһында әңгәмә ҡороу.

**Хәрәкәтле уйындар "Туп тот һәм һан әйт" –** иғтибарлылыҡ, зирәклек, уйлау һәм һанау белеү һәләттәрен үҫтереү.

**Хәрәкәтле уйындар "Үҙеңә пар тап"** - балаларҙың иғтибарын, етеҙлеген, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү.

**Уйын – күнегеү:** сүғәләп ҡаҙҙар кеүек атлап йөрөй.

**Хеҙмәт:** сыйырсыҡ ояларын урынлаштырыуҙа ярҙам итеү.

**8-се картотека.**
**Яҙғы йәшенде күҙәтеү.**
**Маҡсат -** йәшен тураһында белешмә биреү, йәнһеҙ тәбиғәттең үҙенсәлектәре тураһында белемдәр биреү, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен иҫтә тотоу.
Күк күкрәй, йәшен йәшнәй ,
Ямғыр силәкләп ҡоя.
Йәшел үләндәр йәшәрә,
Тәбиғәт һыуға туя.
Йәшен нисек барлыҡҡа килә? Ул тәбиғәткә кәрәкме? Хәүефһеҙлек саралары тураһында һөйләү (йәшен ваҡытында тышта йөрөргә ярамай, өйҙә лә бөтә электр приборҙарын һүндереп ултырырға кәрәк).

**9-сы картотека.**
**Йәшел үләнде күҙәтеү.**
**Маҡсат :** ҡаҙ үләне, бесәй табаны кеүек үләндәр менән таныштырыу, уларҙың ерҙе биҙәүе, ергә матурлыҡ һәм йомшаҡлыҡ, йәшеллек килтереүсе мөғжизә тип күрергә өйрәтеү, үҫемлектәргә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.
иң тәүҙә ерҙән ҡаҙ үләне шытып сыҡты.
үләндәр шыттылар,
ҡояшҡа үрелеп,
йәмләнде яландар,
хәтфәгә төрөнөп.        (Ш.Биҡкол)
хәтфә - ул йәшел төҫтәге йомшаҡ туҡыма, автор тәүге үләндәрҙе хәтфә менән сағыштыра, үлән шытып сыҡһын өсөн ниндәй шарттар булырға тейеш? (йылы ҡояш нурҙары, ямғыр)

**10-сы картотека.**

**Ҡоштарҙы күҙәтеү:**.ҡоштарҙы уларҙың ҡауырһындары, төҫтәре, тауыштары буйынса айырырға күнектереү, ҡоштарҙың тәбиғәттәге ролен асыҡлау, хәстәрлекле ҡараш тәрбиәләү.
тамсы тама – туп – туп - туп,
ҡоштар һайрай сут – сут - сут.
**Хәрәкәтле уйындар ‘’Һунарсы һәм өйрәктәр“** - яңы уйындың ҡағиҙәһе менән Танышыу, етеҙлектә күнектереү, күҙ күремен сыныҡтырыу.
**Хәрәкәтле уйындар ‘’Ашарға ярай ,ярамай‘’** - тупты етеҙ тоторға өйрәтеү, логик фекерләүҙе үҫтереү.
**Хеҙмәт:** - веранданы сүп - сарҙан таҙартыу.

**11-се картотека.**

**Йәйғорҙо күҙәтеү.**
**Маҡсат -** йәнһеҙ тәбиғәттең бер өлөшө - йәйғор тураһында белешмә биреү.
- Аллы - гөллө көйәнтәмде,
йылға аша ташланым. (йәйғор)

Әңгәмә үткәреү - йәғор ҡайһы ваҡыт килеп сыға? Ҡайһы ваҡыт юғала? Йәйғор ниндәй күренеш ул? Уның төҫтәре тураһында нимә әйтеп була? (каждый охотник желает знат, где сидит фазан). Ҡыйыу оҫта һунарсы йүнәлтте зөңгәр күккә шоңҡарҙы - ҡыҙыл,оранжевый, һары.йәшел, зәңгәр, күк, шәмәхә.
**Хеҙмәт эшмәкәрлеге** - майҙансыҡтағы сүп-сарҙы йыйыу.
**Хәрәкәтле уйын - "Беҙ күңелле шат балалар"** - шиғырҙың һүҙҙәренә ярашлы хәрәкәттәр башҡарыу,уйынды дәртле темпта алып барыу.
**Уйын-күнегеү** – баскетбол - яңы уйындың элементтарын үҙләштерергә булышлыҡ итеү.

**12-се картотека.**

**Сәскә түтәлен күҙәтеү.**
**Маҡсат:** - яҙғы түтәл ниндәй хәлдә булыуын асыҡлау, сәскәләр үҫтереү ысулдарын асыҡлау
**Эш барышы:**
Ал сәскә лә бал бирә.
Күк сәскә лә бал бирә,
Һарыһы ла бал бирә,
Барыһы ла бал бирә.
- Баҡса сәскәләрен һанап китегеҙ, һеҙгә улар оҡшаймы? Ни өсөн? Сәскәләрҙе ултыртыр алдынан нимә эшләргә кәрәк? Улар сәскә атһын, матур булып үҫһен өсөн нимә эшләргә була? Ни өсөн беҙҙең яҡтарҙа хәҙерҙән сәскәләрҙе тышҡа сығарып ултыртырға ярамай? Ни өсөн улар берйыллыҡ, күпйыллыҡ сәскәләр тип атала?
**Хеҙмәт:** баҡса эштәрендә ярҙамлашыу - күмәкләшеп эшләргә булышлыҡ итеү
**Хәрәкәтле уйындар "Ниндәй команда тиҙерәк теҙелә"** - йүгереүҙә, етеҙлектә, ойошҡанлыҡта күнектереү
**Уйын - күнегеү:""Ҡолама"** - бүрәнә буйлап йөрөү

**13-сө картотека**.
**Велосипедты күҙәтеү.**
**Маҡсат:** -велосипедтың кеше тормошонда кәрәклеген аңлатыу.
**Эш барышы-**
Ике аяҡлы үгеҙ, маңлайында ҡуш мөгөҙ (велосипед)
Өлкәндәр һәм балалар өсөн велосипедтың ниндәй айырмалары бар (ҙурлығы һәм тәгәрмәстәренең һаны буйынса) велосипедтың ниндәй өлөштәре бар, уны йөрөтөү ҡыйынмы, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен белеү кәрәкме?
**Хеҙмәт:** - балаларҙың велосипедтарын махсус урынға алып барып ҡуйыу
**Хәрәкәтле уйындар "Тотолма!"** - етеҙ ҡасып йүгерергә күнектереү
**Уйын-күнегеү:** - сәпкә туп атыу - ҡулдарҙың көсөн, күҙкүремен, иғтибарлылыҡтыүҫтер..

**14-се картотека.**

**Умырзаяларҙы күҙәтеү .**

**Маҡсат** - яҙҙың тәүге сәскәләре тураһында әңгәмәләшеү, умырзаялар "Ҡыҙыл китапҡа" ингән. Ни өсөн? Ниндәй умырзаяларҙы беләһегеҙ? Яҙҙың тәүге сәскәләренә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Эш барышы:**

Һай, күңелле, дуҫтар, был айҙа!
Күҙ сағылтып ята туғайҙа ҙа!
Умырзая матур сәскә атҡан,
Сырлап оса күктә турғайҙа

- Умырзая – иң тәүге яҙ сәскәһе. Ҡаты ҡыштан һуң сыҡҡан тәүге сәскәгә кешеләр шул тиклем һоҡланалар. Өҙөп гөлләмә эшләйҙәр. Ләкин умырҙаяларҙы өҙөргә ярамай. Улар тәбиғәттә бик әҙ ҡалғандар. Уларҙы кеше генә өҙөп бөтөрмәгән – күпләп мал ашай, улар үҫкән тау битләүҙәрен емереп юлдар төҙөйҙәр, тәбиғи материалдарҙы алалар.

# АПРЕЛЬ - АЛАҒАРАЙ

Иртә - кисен - һалҡын,
Йылы - көндөҙ.
Ҡояшбикә ҡарҙы имә өнһөҙ.

**1-се картотека**

**Урам һепереүсенең эшен күҙәтеү.**
**Маҡсат:** - Уларҙың хеҙмәте тулыһынса изгелектән һәм яҡшылыҡтан тора, уларҙың хеҙмәтен баһалау һәм хөрмәтләү тойғоһо тәрбиәләү.
**Эш барышы:**
Әңгәмә - был ағай ниндәй эштәрҙе башҡара? Ни өсөн ул таҙалыҡ һәм тәртипте ярата? Ул кешеләр тураһында ниндәй һүҙҙәр әйтеп була? (егәрле, эшлекле, бөхтә, тәбиғәт яратыусы, яғымлы, хөрмәтле һ.б.)
**Хәрәкәтле уйындар: "Оса, һикерә, йүгерә"** - балаларҙы йүгереүҙә һәм балыҡтарҙың, ҡоштарҙың, хайуандарҙың атамаларын әйтеүҙә күнектереү.
**Хәрәкәтле уйындар "Бураны ҡолат" -** сәпкә төҙ генә туп бәрергә, иғтибарлылыҡта күнектереү.
**Уйын – күнегеү** - предметтар араһынынан йылан кеүек йөрөргә, уларҙы ҡолатмаҫҡа күнектереү.

**2-се картотека.**

**Күгәрсендәрҙе күҙәтеү.**
**Маҡсат:** - ҡоштар тураһында белемдәрен нығытыу, ни өсөн ҡырағай күгәрсендәр "Ҡыҙыл китапҡа" индерелгәнлеген аңлатыу.
**Эш барышы:**
Йомаҡ ҡойоу:
- Гөлдәр – гөлдө, гөлдөрсөк,
Гөлкәй ҡыҙыл ситекле (күгәрсен)
**Әңгәмә** - майҙансыҡҡа ниндәй ҡоштар йышыраҡ осоп килә? Улар нимә суҡып ашайҙар? Күгәрсендәр нисек йәшәйҙәр? (күгәрсендәр тыныслыҡ ҡоштары булып һанала, улар кешегә тиҙ эйәләшәләр, улар хат ташыусы булып та йөрөй алалар, ҡырағай күгәрсендәр тәбиғәттә бик әҙ ҡалғандар, шуға күрә "Ҡыҙыл китапҡа" индерелгән.
**Тикшереү-тәжрибә эше**-күгәрсен менән тумырҡҡаны саҡыштырыу.
**Хәрәкәтле уйындар "Ҡарсыға һәм себештәр" -** тәрбиәсенең командаһын тыңларға, иғтибарлылыҡта күнектереү.
**Хәрәкәтле уйындар "Үҙ өйөңдө тап" –** тирә - йүндә йәһәт һәм тиҙ үҙеңдең мөйөшөңдө табырға булышлыҡ итеү.
**Уйын - күнегеү** –туптар менән уйнау - өҫкә сөйөү, ергә һуҡтырыу.ике ҡуллап тотоу.

**4-се картотека.**

**Маҡсат:** тәбиғәттә яҙғы үҙгәрештәрҙе күрергә булышлыҡ итеү, турғайҙарҙың ҡыланыштарында яҙ сағылышын күҙәтеү, ҡоштарға хәстәрлекле ҡараш тәрбиәләү.
**Эш барышы:**
Өйгә ингән сыпсыҡ,
Осоп йөрөй сыпсыҡ,
Сыҡ - сыҡ, сыҡ - сыҡ,
Сыҡ, сыпсыҡ!

Әҙ генә йылытҡайны турғайҙар сырҡ килешеп туптарға йыйылып ерҙә һикерешә башланылар, ҡыуанышалар, бер турғай ҡуләуек тапһа тиҙ генә йыуынырға, сумырға тотона.улар нимә менән оя төҙөйҙәр? (кипкән үлән, мамыҡ, ҡауырыйҙар менән ) уларға оя нимәгә кәрәк ул? (йомортҡа һалалар һәм аҙаҡтан балаларын - ҡошсоҡтарын сығаралар) турғайҙар уларға нимә ашаталар? (бөжәктәрҙе ашаталар)
**Хеҙмәт:** - сәскә түтәлдәрен ҡыйҙан таҙартыу.
**Хәрәкәтле уйындар "Кем тиҙерәк?"** - йүгереүҙә күнектереү, етеҙлек, таççыллыҡ тәрбиәләү.
**Уйын - күнегеү:** - Асфальта зигзаг һүрәт буйлап йөрөү (тигеҙлектә күнектереү)

**3-сө картотека**
**Ҡояшты күҙәтеү.**
**Маҡсат** - ҡояш системаһының үçемлектәр, хайуандар, кешеләр тормошона йоғонтаһы тураһында белемдәрен барлау.
**Эш барышы** –
Ҡыҙарып килеп сыға
Яҡты нурҙарын һуҙа
Көнө буйы йылыта
Кисен өйөнә ҡайта. (ҡояш )
Ҡояш юғарыраҡ торған һайын йылыраҡ һәм көндәр оҙонораҡ, ҡар ирей, ер йылына, яйлап үлән үçә башлай.тәбиғәттә нимә барлыҡҡа килә? Ҡояш ҡайҙа сыға һәм ҡайҙа байый?
**Тикшереү - тәжрибә эше** - тимер предметтарҙы тотоп ҡарау - ҡояш ҡайһы ерҙәрен нығыраҡ йылыта? Нимә менән ҡояшҡа оҙаҡ итеп ҡарап тороп була?
**Хеҙмәт:** - бордюрҙарҙы һепереп сығырға - ярҙам итеү теләге тыуҙырыу.
**Хәрәкәтле уйындар: "Ҡояш һәм планеталар"** - ҡояш тирәһендәге планеталарҙың хәрәкәттәрен ҡабатлау.
**Уйын - күнегеү:** - урындан оҙонлоҡҡа һикереү - һикереүҙә,көстә күнектереү.

**5-се картотека**

**Маҡсат:** -тәбиғәттәге үҙ - ара бәйләнеште аңларға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:**
Төндә апрель ҡыйыҡтарға
Элеп ҡуйҙы боҙбармаҡ.
Тик ҡояшҡай боҙбармаҡты
Әйләндерҙе тамсыға.
Балаларҙың иғтибарын иртәнсәк ҡар өҫтөнә ҡатҡан боҙ ҡатламына йүнәлте, көндөҙ ҡар өҫтө ныҡлап ирей, ә төндә ҡар туңа.
**Тикшереү - тәжрибә эше:** көрт эсендәге ҡарҙы, ирегән йомшарған ҡарҙы һәм күләүектәге һыуҙы ҡарап сағыштырыу.
**Хеҙмәт:** - Тәрбиәсе менән ҡороған ҡыуаҡтарҙы секатор менән ҡырҡып ташлау - ярҙамлашыу теләге тыуҙырыу.
**Хәрәкәтле уйындар "Кәзә менән бүре"** - түңәрәкте боҙмай йөрөргә һәм йүгереүҙә күнектереү.
**Уйын - күнегеү** - уң һәм һул ҡул менән туп ташлау - етеҙлектә, түҙемлелектә күнектереү.

## 6-сы картотека.

**Миләш ҡыуағын күҙәтеү.**
**Маҡсат:** миләш тураһында белемдәрен нығытыу.күҙәтергә, үҙгәрештәрҙе күрергә, һығымталар яһарға булышлыҡ итеү.
**Эш барышы:**
Миләш бирә ҡыҙыл емеш,
Тәлгәше арыу икән,
Әсе булһала ашайбыҙ,
Сөнки ул дарыу икән. **(И.Галин)**
Миләш ҡасан сәскә ата? Уның сәскәләре ниндәй төҫтә? Уның емештәрен кемдәр яратып ашай? (терпе, мышы, тейен, ҡыҙылтүштәр) ни өсөн ҡоштар емештәрҙе ҡарға ташлайҙар? (ҡар аҫтында емештәр консерваланған кеүек һаҡланалар. Яҙ көнө ҡоштарға әҙер ашамлыҡ) миләш кешеләргә ниндәй файҙа килтерә? (емештәренән дже, ҡайнатма, бал, ағасынан һауыт - һаба, һабаҡтарынан кәрзиндәр үрергә эшләргә була)
**Хеҙмәт:** - ағастар ултыртыу - ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртырға теләк тыуҙырыу, тәбиғәтте һаҡларға һәм ярҙамлашырға булышлыҡ итеү.
**Хәрәкәтле уйындар "Бесәй менән сысҡан"**- уйынды үҙ - аллы ойошторорға булышлыҡ итеү.
**Уйын - күнегеү**: - туптарҙы төрлө ысулдар менән һикертеүҙә нектереү.

**7-се картотека.**

**Таштарҙы күҙәтеү.**
**Маҡсат:** таштарҙың төрлөлөгө һәм үҙенсәлектәре менән таныштырыу.
**Эш барышы:** (майҙансыҡта төрлө таштар тултырып шкатулка йәшереү) карта буйынса эҙләп уны табыу, һеҙҙең таш тапҡанығыҙ бармы? Ниндәй таштар күрмәнегеҙ бар? Таштар менән бик күп ҡыҙыҡ уйындар бар
**Тикшереү - тәжрибә эше:** майҙансыҡта яҫы һәм түңәрәк таштар эҙләп табыу.
**Хеҙмәт:** коллектив өмә - майҙансыҡтағы бөтә таштарҙы йыйып алырға, татыу .кәңәшләшеп ауыр эштәрҙе башҡарырға булышлыҡ итеү.
**Хәрәкәтле уйындар "Шишмәкәй" -** парлашып хәрәкәтләнергә күнектереү.
**Уйын - күнегеү:** дүңгәләктәрҙе (обручтарҙы)төрлө йүнәлештә өйөрөлөтөп йөрөү.

**8-се картотека**

**Ҡыуактарҙы күҙәтеү.**
**Маҡсат:** һәр ҡыуаҡ һәм ағас - ул йәнле тәбиғәт икәнлегенә төшөнөү.
**Эш барышы:**
Көҙҙәр етһә, емештәре
Ҡыҙара.балҡый ялан.
Урманда ла, баҡсала ла .
Кинәнеп үҫә ....(балан) Ф.Ғөбәйҙуллина.
- Әңгәмә - яҙ көнө ҡыуаҡтар ниндәй үҙгәрештәр кисерә? Һынған, туңған урындар бармы? Уларҙы нимә эшләтеп була?
Хеҙмәт – һынған, туңған ботаҡтарҙы секатор менән ҡырҡып ташларға тәрбиәсегә ярҙам итеү.
**Хәрәкәтле уйындар "Йәшенмәк"** -ҡағиҙәләрҙән ситкә тайпылмау, һанашмаҡ ятлау, етеҙ йүгереүҙә күнектереү.
**"Буш урын" -** балаларҙың иғтибарлылығын,етеҙлеген үҫтереү, һүҙҙәрен ятлау.
Уйын – кунегеү - ҡаршылыҡтар аша атлап йөрөү.

**9-сы картотека.**

**Гөрләүектәрҙе күҙәтеү.**
**Маҡсат:** гөрләүектәр ҡайҙан барлыҡҡа килеүен, йәнһеҙ тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе аңларға булышлыҡ итеү, логик фекерләүҙе үҫтереү.
**Эш барышы:**
Гөрләп аҡ һин, гөрләүегем,
Тәрән йылғаға ҡарап,
Ә мин һиндә йөҙҙөрөргә
Яһаным ҡағыҙ карап. (З.Йәнбирҙина)
**Хеҙмәт -** веранданы таҙалыҡта тоторға ярҙам итеү.
**Хәрәкәтле уйындар "Ҡатырғыс" -** һанашмаҡ менән көтөүсе һайлау, ҡағиҙәләрҙе боҙмай уйнарға булышлыҡ итеү.

**Хәрәкәтле уйындар "Еҙ бүкән" -** һанашмаҡ ятлау ,етеҙлектә күнектереү.
**Уйын – күнегеү -** төрлө  ысулдар менән һикереп уйнау.